Уйланыуҙар

# НИ ӨСӨН КЕШЕЛӘР ҮҘҘӘРЕН АЛДАЙҘАР?

Харун ЯХЬЯ,
Оксана НАЗАРОВА тәржемәһе

**Иманһыҙ кешеләрҙең маҡсаттары, тормошҡа ҡараштары оҡшаш, асылда, бер төрлө. Һәр әҙәм бөтмәҫ пландар ҡора: мәктәпте яҡшы билдәләр менән тамамлау, университетҡа уҡырға инеү, аҡсалы эшкә урынлашыу, өй һатып алыу, ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү һәм, хаҡлы ялға сығып, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре араһында тыныс йәшәү... Әммә һәр беребеҙ, бәлки һис көтмәгәндә, үлемен осратасаҡ.**

Донъяүи эштәре менән мәшғүл кеше әхирәт тураһында уйланырға ваҡыт табырға теләмәй. Бындағы йәшәйеше өсөн генә тырышҡан мәңгелеккә бер ҙә әҙер түгел булып сыға. Кеше үлем, теге донъя хаҡында төшөнкө уйҙарҙан ҡотолорға маташа, төрлө юлдар менән яуаплылыҡтан ҡаса. Тик хәҡиҡәтте танып өлгөрмәүе ихтимал, әжәл килгәндә тәүбә ҡылырға һуң буласаҡ.

### Аҙашҡан кешеләр

Шайтан төрлө юлдар аша кешене үҙенең артынан ылыҡтыра: фани ҡиммәттәр менән ҡыҙыҡтыра, Аллаһ алдындағы вайымһыҙлығына һылтауҙар табырға "ярҙам итә". Был донъяға яратылыу сәбәбен онотоорға мәжбүр итеп, бер көнлөк, гонаһлы эштәргә һәм маҡсаттарға йүнәлтә. Ошо саҡырыуҙарға бирешкән кеше Аллаһы Тәғәләне танып белеү мөмкинселегенән мәхрүм буласаҡ.

"Ә Әр-Рәхманды иҫкә алыуҙан ситләшкән кешегә шайтанды билдәләп ҡуйырбыҙ, ул уға иптәш булыр. Һәм уларҙы, әлбиттә, юлдан яҙҙырырҙар, һәм улар тура юлдан барабыҙ тип уйларҙар, ул Беҙгә килеп (дуҫы шайтанға): "Аһ!Әгәр һинең менән минең ара мәғриптән мәшриҡкә тиклем булһа ине", - тип әйткәнгә ҡәҙәр. Насар иптәш ул! Һеҙ үҙегеҙ золом ҡылғас, һеҙҙең ғазапта уртаҡ булыуығыҙ һеҙгә бөгөн һис тә ярҙам итмәҫ. Һин һаңғырауҙы ишеттерә алырһыңмы йәки һуҡырҙы һәм асыҡ аҙашыуҙа булған кешене тура юлдан алып бара алырһыңмы?" (Ҡөрьән, 43:36-40).

Аллаһ хәҡиҡәтте танырға теләмәүселәрҙе "һуҡырҙар" һәм "һаңғырауҙар" тип атай. Бындай кешеләр рухи яҡтан зәғиф. Улар үҙҙәренең намыҫын, күңел тауышын тыңламайҙар, шул уҡ ваҡытта, дөрөҫ йәшәйбеҙ, тип уйлайҙар. Ысынында, тик үҙҙәрен генә алдайҙар. Бындай кешеләр бик күп. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә: "...Әммә күп кешеләр үҙ Раббыһы менән осрашыуға ышанмай!" (Ҡөрьән, 30:8).

Дөрөҫлөккә күҙ ябыу - ысын мәғәнәһендә ахмаҡлыҡ. Уйланыуҙарҙан ҡасыу был ҡыҫҡа донъяла ла, мәңгелеккә лә файҙа килтермәйәсәк, тик үкенес кенә.

### "Мин белмәнем, был бер ҡасан да башыма килмәгәйне"

Әгәр кеше ғүмеренең һәр бер мәлен айырым бер кадр итеп күҙ алдына килтерһәк, беҙҙең тормош триллион кадрҙарҙан тороуы асыҡланасаҡ. Ошо хисапһыҙ кадрҙарҙың һәр береһе - кешегә уйланыу өсөн бирелгән мөмкинселек.

Фекер йөрөтә алыу - Аллаһы Тәғәләнән бирелгән оло бүләк. Ошо һәләт кешегә Ҡиәмәт көнөнә әҙерләнергә мөмкинселектәр аса. Әммә һәр әҙәм "уйланыу" һүҙен үҙенсә аңлай. Ҡайһы берәүҙәр был төшөнсә бәхет, муллыҡ хаҡында хыялланыуҙы аңлата, тиҙәр. Икенселәр, башҡарылған эштәрҙе анализлау фекер йөрөтөү менән бер, ти. Улар туҡтауһыҙ нимәнәндер мәхрүм булып ҡалыуҙары, йә киләсәктә ниҙер өмөт итеүҙәре тураһында уйланалар. Өсөнселәр иһә, иң дөрөҫө - бөгөнгө көндө хәстәрләү, ти. Көн артынан көн үтә, ә кешеләр ошондай уйҙарҙан арына алмайҙар.

Иртән торған, нимә менән туҡланасаҡтары, ҡайһы автобус менән эшкә барасаҡтары, кем менән төшкөһөн ашаясаҡтары тураһында борсолалар. Ниндәй фирманың акцияларын һатып алыу уңышлы буласаҡ, нисек итеп киләһе футбол ярышына билеттар табыу, кем менән киске уйынға сығыу... Икенсе төрлө әйткәндә, күптәрҙең уйҙары был донъя мәшәҡәттәре менән генә сикләнә.

Беҙҙе Хоҙай бөтөнләй икенсе фекерләүгә өндәй. Аллаһ барлыҡҡа килтергән миллионлаған заттар, әхирәт, үлем, Хөкөм көнө хаҡында уйланыуҙар талап ителә. Әммә был һорауҙарҙы күптәр бөтөнләй ҡуҙғалтмаҫҡа тырыша.

Кешеләр әллә күпме йылдар белем ала, биолог, инженер, ғалим булып китәләр, ләкин бер тапҡыр булһа ла үҙҙәренең юҡлыҡтан килеүҙәре, ни өсөн яралыуҙары хаҡында уйлап та ҡарамайҙар. Бер минутҡа ла был донъянан китәсәктәрен күҙ алдына килтерә алмайҙар. Кешеләр тәрән һушһыҙлыҡта йәшәйҙәр, һәм был онотолоу ғүмер буйы дауам итә.

Кешегә аң, намыҫ Аллаһы Тәғәләне танып белеү, ғибәҙәт ҡылыуҙың ни тиклем әһәмиәтле икәнен аңлау өсөн бирелгән. Йәшәйештең иң мөһим һорауҙары хаҡында уйланырға мөмкинселек таба алмаған кешеләр матди байлыҡтарға килгәндә айыҡ аҡыл менән эш итәләр. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡты ғына алғанда, кеше нисек итеп килемдәрҙе бүлергә, кем аша ниндәйҙер мәсьәләне хәл итергә белә. Эшендә уңышҡа өлгәшер өсөн ул бар ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға әҙер. Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, һәр әҙәмдең тигәндәй зиһене, эҙмә-эҙлекле фекер йөрөтөү һәләте бар, әммә кеше уларҙы донъяүи табыш алыу өсөн генә ҡуллана. Шуға күрә, "мин уйламаным", "белмәнем" кеүек һылтауҙарҙың ҡеүәте булмаясаҡ.

Ҡайҙа ғына кеше күҙ ташлаһа - һоҡландырғыс донъя. Барыһы ла килешле бәйләнештә. Күргән, ишеткәндәре тураһында ихлас уйланған әҙәм бер ҡыйынлыҡһыҙ донъяның осраҡлы рәүештә барлыҡҡа килеүенең буш һүҙ булыуына ышанасаҡ. Булмәлә эленеп торған һүрәткә күрһәтеп: "Ошо рәсем үҙенән үҙе тыуғанмы икән?" - тип һораһаң, кеше һис шикһеҙ: "Ниңә мәғәнәһеҙ һорау бирәһең? Нисек инде рәсем үҙенән үҙе килеп сыҡһын. Әлбиттә, уны төшөрөүсе рәссам бар", - тигән яуап ҡайтарасаҡ. Һәм шул уҡ еңмеш кеше донъяның осраҡлы барлыҡҡа килеүен дәлилләргә тырышасаҡ.



Кешеләр яҡындарының үлеүен күреп торалар, әммә үҙҙәренең был донъянан китәсәктәренә һис тә ышанырға теләмәйҙәр. Мәңге йәшәйәсәкбеҙ тип, оҙайлы пландар ҡоралар. Ғүмерҙең мәғәнәһен аңлау, Аллаһты таныу - ул тиклем ауыр ҙа түгел. Хәҡиҡәткә төшөнөү бер нидәй ҙә махсус белем талап итмәй, тик саф йөрәк кенә кәрәк.

Барлыҡ етешһеҙлектәребеҙ күреүсе шайтан нисек булһа ла беҙҙе тура юлдан яҙҙырырға маташа. Уның иң көслө хәйләләренең береһе - кеше күңеленә "белмәү" яуаплылыҡтан бушата" тигән фекер һалыу. Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе иҫкәртеп, Хөкөм көнө тураһында былай ти: "Һәм ул көндә залимдарҙың ғәфү үтенеүҙәре уларға ярҙам итмәҫ, һәм уларға шәфҡәт тә күрһәтелмәҫ" (Ҡөрьән, 30:57).

### "Мин барыһын да яҡшы аңлайым, әммә ғибәҙәт ҡылырға ваҡытым юҡ, ҡамасалаусы сәбәптәр күп"

Аллаһ Ҡөрьән Кәримде тәҡүәлеккә, рухты камиллаштырыуға юлды күрһәтер өсөн ебәргәндер. Һәр кем Уның алдында дини ҡанундарҙы үтәүе-үтәмәүе өсөн яуап тотасаҡ. Күптәр ҡыҫынҡы хәлдәрҙе үҙҙәренә һылтау итеп күрәләр. Уҡығанда - бер сәбәп, эшләй башлағас - икенсе. Ғаилә ҡороп, бала тәрбиәләүселәр тағы ла күберәк һылтауҙар таба. Асылда, бар ғүмер кеше өсөн ғибәҙәт ҡылыуға кәртә, тотҡарлыҡ булып торғандай. Дөрөҫөн әйткәндә, һәр беребеҙ көс һалмайынса төрлө эштәргә ваҡыт таба ала. Бигерәк тә был эш матди хәлде яҡшыртырға булышлыҡ итә алһа. Быны асыҡ итеп күрһәтеү өсөн ошондай миҫал килтерәйек. Әйтәйек, кешегә һәр көн сәғәт эсендә башҡарылған бер эш өсөн бик ҙур аҡса вәғәҙә итәләр (мәҫәлән, бер айлыҡ эш хаҡы күләмендә), ул уйлап та тормайынса ризалашасаҡ. Күптәр йоҡо, ял итеүҙе онотоп, ошо эшкә тотонасаҡтар, "ваҡытым етмәй" тигән һүҙ ҙә ишетелмәйәсәк.

Донъяүи эшкә атлығып тотонған кеше нисек итеп ғибәҙәт ҡылырға теләмәүен, ялҡаулығын аңлата алһын? Мәңгелек рәхәттәрен "аҡса" менән сағыштырып та булмай. Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт белдереү кеше күңеленә иң яҡшыһын бирә ала - Аллаһтың мәрхәмәтен, шәфҡәтен. Үҙҙәрен алдаусы кешеләр тәҡдире хаҡында Ҡөрьәндә былай тиелә:

"Ул көндө кешегә киләсәккә нәмә әҙерләгәне һәм нәмә ҡалдырғаны хәбәр ителер. Ул көндө кеше үҙ-үҙенә ҡаршы шаһит, гәрсә үҙенең ғәфү үтенгәнен белдерһә лә" (Ҡөрьән, 75: 13-15).

**Ниндәй генә һылтауҙар табырға тырышһаҡ та, зиһенебеҙ менән уларҙың мәғәнәһеҙлеген аңлаясаҡбыҙ. Мәңгелектә ғазаптарҙан ҡотолоу сараһы тик бер генә икәнлеген онотмайыҡ - ул Аллаһтың Шәфҡәтенә ирешеү.**

# ТАШЛАП КИТӘМЕН БЫЛ ЙОРТТО...

Был йортта иман ҡалмаған. Бары тик һоро масса. Ҡайҙан килгәнен дә иҫләмәй, ҡайҙа юл тотҡанын да онотҡан. Йорттоң тәҙрәләрен артҡыры таҡталар менән ҡатҡылап бөткәндәр, яҡтылыҡ мөмкин тиклем әҙерәк инһен тип. Ә ишекте асып ҡараусы юҡ - ингән кешеһе лә юҡ, сыҡҡаны ла.

Шулай йәшәй был йорт, һимеҙерәктәре, ҙурыраҡтары иң өҫкә менеп тороп алған, ҡалғандарға аҡыл өйрәтә. Ә тегеләре, бахыр, ҡолаҡтарын япҡан да, тештәрен ҡыҫып түҙә: "Ҡасан бөтә был мәхшәр, алдаҡ, ике йөҙлөлөк?! - тиҙәр. - Ниңә үҙебеҙҙекеләр үҙебеҙҙе алдайҙар? Тыныс ҡына үлергә бирегеҙсе!" Бында халыҡ ашау менән генә мәшғүл. Иртән тора ла - тамаҡ, төшкөһөн дә - тамаҡ, кис ятыр алдынан да - тамаҡ, мотлаҡ рәүештә - тамаҡ! Тамаҡ, тамаҡ, ашарға, ашарға, ашарға!

- Тыңла әле, күрше. Анауында берәү иман, көс тураһында һөйләй түгелме, ҡорт кеүек иҙелмәҫ борон, картуф кеүек серемәҫ, эт кеүек атылмаҫ борон нәфсебеҙгә ҡаршы яуға күтәрелеп ҡалайыҡ, ти.

- Эй, тыңлама һин уны. Алйот ул. Атаһы ла шулай алйот булды, олатаһы ла. Ниндәй ҡорт булайым ти мин, ниндәй серек картуф тағы? Аллаға шөкөр, телевизорым бар, ҡатын аш бешерә, ике сусҡа аҫрайым, тамағым туҡ... Юҡты һөйләмә.

- Шулай шул. Минең дә бер ниндәй ҙә иректә лә, көстә лә хәжәтем юҡ. "Халҡым" тигән булып кеше аптыратып йөрөп булмаҫ.

Әллә Хоҙай үҙе ҡәһәрләгән инде был йортто, әллә тәбиғәт ҡанундары шулай үлергә ҡуша? Әммә барыбер был фажиғә һис башҡа һыймай, улай булырға тейеш түгел бит! Тарих бүтәнде һорай, изге китаптар бүтәнде талап итә.

- Бар кит, бимазалап йөрөмә, - тиҙәр.

- Ә-ә-ә, улай икән, улай икән, уйлап алыр кәрәк, - тиҙәр икенселәре.

Шулай "уйланып" ята торғас, яндарындағы саң-тупраҡ, серек картуф, иҙелгән ҡорт-ҡарышлауыҡтар менән буталып, тамам ҡомға әүерелделәр, ҡап-ҡараңғы ҡалған йорт та, был хәшәрәткә сыҙай алмай, үҙенән-үҙе ауҙы...

Ярай әле, мин был йортто күптән түгел ташлап киткән инем. Һәм тағы ла минең кеүек бер нисә кеше. Сөнки "халҡым" тигән нәмә беҙҙең өсөн әле һаман да изге, "иман" тигән төшөнсә әле һаман да ҡиммәт. Иҫке йорт ауҙы, ә беҙ яңыһын төҙөйәсәкбеҙ!